## *Башkорт китабы - милләтебеҙҙең рухи байлығын һаkлаусы*

*Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙы,*
*Туймазы педагогия колледжының*
*башkорт теле һәм әҙәбиәте уkытыусыһы*

Башkорт әҙәбиәте – башkорт халkының рухи донъяһының, мәҙәниәтенең иң үҙәк өлөштәренең береһе. Уның тамырҙары алыҫ мең йыллыkтар төпкөлөнән, боронғо ырыу kәбиләләренең һүҙ сәнғәтенән һут алып йәшәй. Күп кенә ғалимдарҙың раҫлауынса, башkорт әҙәбиәтенең, шиғриәтенең сығанағы булып «Урал батыр» кеүек kобайырҙар һанала. Шул осорҙарҙан бирле күпме ваkыт үтте, күпме һыуҙар аkты, заманалар үҙгәрҙе, батшалар алмашынды, әллә ниндәй цивилизациялар төҙөлдө, емерелде, тағы төҙөлдө... Әммә донъяла бер таяу үҙгәрмәй. Ул - беҙҙең алтынға бәрәбәр байлығыбыҙ - рухи kиммәттәр. Был kиммәттәр, бер яkтан, ата-олатайҙарыбыҙ биргән өгөт-нәсихәттәре аша тапшырылһа, икенсе яkтан, илһамланып ижад иткән яҙыусыларыбыҙ китаптары аша еткерелә. Ошоға бәйле француз шағиры П.Буастеның һүҙҙәрен әйтке килә: «Кешелектең һайыkмай торған берҙән-бер хазинаһы бар, ул - китапхана». Ә башkорт китаптары - ер шарында кешелек тыуҙырған китаптар донъяһының зиннәтле һәм сағыу бер биҙәге. Халkыбыҙҙың аңы, халыk рухиәте сәсәндәр, шағирҙар, яҙыусылар ижады аша йәшәй, үҫә, мираҫ kалдыра. Улар кеше күңеленә оскон һала, уттай дөрләп йәшәһен өсөн; йәшен сатkыһын һала, йәшнәп ижад итһен, хеҙмәт итһен өсөн; йыр, моң һала, ғәмһеҙлектән, бәғерһеҙлектән ваз кистерер өсөн. Әммә кеше ғүмеренә, донъяһына үрт һалмай.

Ҡалалағы, район үҙәктәрендәге, ауылдарҙағы һәр китапхана - кешелектең аҡылын туплаған китаптарҙан торған үҙенә күрә бер батшалыҡ. Ә башҡорт китаптары ошо батшалыҡта ер йөҙөндә оҙон-оҙаҡ ғүмер кисергән олатайҙарыбыҙҙың күңел ынйыларын, рухи ҡиммәттәрен һаҡлаусылар. Уларға М.Аҡмулла, М.Өмөтбаев, Ҡ.Ғәли кеүек Ҡөнсығыш традицияларын үҫтереүсе әҙиптәр ижадын да, революциянан һуң азат тормош һәм ирекле хеҙмәтте данлаған М.Ғафури, Ғ.Сәләм, Д.Юлтыйҙарҙың шиғри һәм проза әҫәрҙәрен дә, утыҙынсы йылдарҙа нахаҡҡа ғәйепләнгән йәки һәләк ителгән Ғ.Дәүләтшин, Һ,Дәүләтшина, Б.Ишемғол, А.Таһировтарҙың тыйылған һәм оҙон-оҙаҡ һынауҙар аша үткән китаптарын да, шанлы һуғыш йылдарында Тыуған илебеҙҙе үҙ күкрәктәре менән ҡаплаған М.Хәй, М.Харис, Я.Ҡолмой, Ғ.Рамазанов кеүек данлы юл үткән йәки батырҙарса һәләк булған шағирҙарыбыҙ аманатын да, алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа социалистик илдең сәскә атыуы осоронда рухланып яҙған М.Кәрим, Н.Нәжми, З.Биишева, Ә.Мирзаһитов кеүек әҙиптәребеҙҙең йыйынтыҡтарын да һәм бөгөнгө көндә ең һыҙғанып ижад итеүсе, илебеҙҙең һынылыш осоронда халыҡ менән бергә булыусы Р.Бикбаев, Т.Ғиниәтуллин, Х.Назар, Г.Ғиззәтуллина, М.Ҡунафин, М.Кәримов кеүек талантлы яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрен индерәбеҙ. Һәр ижадсы башҡорт халҡының мәҙәниәтенә, йылъяҙмаһына яңы бит өҫтәй. Осорҙар ҙа, ижадсылар ҙа, төрлө, әммә китаптарҙа әҙиптәр еткергән рухи ҡиммәттәр оҡшаш: уларҙа Тыуған илгә һөйөү, уға тоғролоҡ, хеҙмәт итеү, намыҫ, выждан, кешелеклелек кеүек матур төшөнсәләр хаҡында һүҙ

йөрөтөлә. Был китаптарҙы уkыған һәм аңлаған балалар, йәштәр күңеле kаты булмаç, яkшылыkkа ынтылыр, илебеҙҙең лайыkлы киләсәге булыр тигән уй тыуа.

Р.Аҙнағолов башkорт яҙыусыларының китап яҙыуын, ижад итеүен былай тип kылыkһырлай: «Ижад - ул кеше күңеленең һандуғаслы таңы, умырзаялы яланы, ап-аk сәскәле муйылы, йәшен булып йәшнәүе һәм йәшәүе...» Ә беҙ башkорт китаптарын уkып, шул һандуғаслы таңдарҙы kаршылайыk, умырзаялы яланы менән кинәнәйек, геройҙарҙың йәшен булып йәшнәүенән үҙебеҙгә йәшәргә һәм йәшнәргә kеүәт алайыk.